## Донъяла

**МОРОККОЛА ҠОРОЛОҠ.** Мәсеттәр менән идара итеү уның илдең Вакуфтар (йәмғиәт ҡаҙанышы) министрлығы ҡулы аҫтында. Шуға ла министрлыҡ имамдарға һәр йома намаҙынан һуң ямғыр теләү намаҙын уҡыуҙарын һорап мөрәжәғәт итте. Йыл башынан алып тиерлек, илдә ямғыр яуғаны юҡ. Йәмғиәттә боҙоҡлоҡ һәм гонаһ арта барғанға шифалы тамсылар ергә төшмәй, тип белдерә билдәле дин ғалимдары.

"Исламдағы хәләлде һанға һуҡмау, харамға батыу арҡаһында Аллаһ кешеләрҙе төрлө ҡаҙаға юлыҡтыра, - ти мәликит мәҙһәбе белгесе шәйех Мөхәммәд Тәвил. - Был - иман юлынан бармайынса, башбаштаҡлыҡ ҡылыусыларға Аллаһы Тәғәләнең язаһы. Тыйылған сикте үткән кешеләргә ҡәһәр төшә, шул арҡала бәрәкәт юғала. Ә ҡоролоҡ ана шундай ғазаптарҙың береһе".

Рәбәт, Маракеш һәм Морокконың башҡа ҡалаларында ямғыр һорау намаҙы атҡарылды, унда яңы ғына илдең Премьер-министры итеп тәғәйенләнгән Ғәҙеллек һәм үҫеш партияһы етәксеһе Абделиллаһ Бенкиран да ҡатнашты.

**УКРАИНА.** Николаев ҡалаһы һәм Николаев өлкәһе мосолмандары мәсет төҙөрлөк ер һорап, ҡала хакимиәте урынлашҡан бина алдында сара ойоштороҙо. Николаев өлкәһендә 15 мең мосолман йәшәһә лә, ошо көнгә тиклем унда бер мәсет тә һалынғаны юҡ. Николаев ҡалаһында мәсет урынына файҙаланылған фатирға дүрт тиҫтә самаһы ғына кеше һыя.

Ҡала хакимиәте иһә бына 15 йыл инде яңы мәсет өсөн ер бүлеү тураһында вәғәҙә бирә, ләкин эш һүҙҙән ары китмәй. Мосолмандар ҡала советы сессияһы асылғас, акцияны дауам итергә уйлайҙар.

**ҠАҘАҒСТАН ХАЛҠЫНЫҢ ЯРТЫҺЫ - ЙӘШТӘР.**



Ҡаҙағстандың Белем йәнә Ғилем министрлығы министры Бакытжан Жумағулов Л.Н.Гумилев исемендәге Евразия милли университеты студенттары менән осрашыуҙа: "Ҡаҙағстанда йәшәүселәрҙең 50 процентын йәш быуын тәшкил итә", - тип белдерҙе.

"Илдең 50 проценты утыҙ йәшкә тиклемге йәштәрҙән тора. Илебеҙҙә халыҡ үҫеше юғары кимәлдә. Йыл һайын 400 меңдән ашыу бала донъяға килә. Был беҙҙең йәш һәм үҫеүсе ил икәнебеҙҙе күрһәтә", - тине Б.Жумағулов.

***"Яратҡан һәм күп бала таба торған ҡатындарға өйләнегеҙ! Шул хаҡ, мин бүтән өммәттәр ҡаршыһында үҙемдең өммәтемдең күп һанлы булыуы менән ғорурланасаҡмын!" Мөхәммәд пәйғәмбәр (с.ғ.с.). (Әбү Дауд).***

## Уйлан

# ТАШ БӘҒЕРЛЕ ӘҘӘМ - АЛЛАҺТАН АЛЫҪЛАШЫУСЫ



Имам ибн Аль-Кайим аль-Джаузи

Кеше өсөн йөрәк ҡатыуы арҡаһында Аллаһтан алыҫлашыуҙан да ҙурыраҡ яза юҡ. Тамуҡ ҡатҡан йөрәктәрҙе иретер өсөн барлыҡҡа килтерелгән, сөнки ундай йөрәк бөтөн йөрәктәр менән сағыштырғанда ла Аллаһтан алыҫ тора. Күңел ҡатһа, күҙҙең нуры ла һүнә. Быңдай күҙҙәр шатлыҡтан да, тыныслыҡтан да рәхәтлек кисерә алмай.

Дүрт нәмә йөрәк ҡатыуына сәбәпсе: самаһыҙ ашау, оҙаҡ йоклау, күп һөйләшеү, енси ләззәт. Сиргә дусар ителгән тән ризыҡтан да, һыуҙан да дауа ала алмаған кеүек, зарарланған йөрәк өгөт-нәсихәттән файҙа таба алмай.

Үҙенең йөрәген таҙартырға ынтылған әҙәм үҙ теләктәренә ҡарағанда Аллаһ ҡушҡандарҙы үтәргә, уларға өҫтөнлөк бирергә тейеш. Ә инде йөрәк ни тиклем ләззәт кенә алырға ынтыла, шул уҡ дәрәжәлә Аллаһтан алыҫлашҡан булыр. Йөрәктәр - Аллаһтың ерҙәге һауыттары. Аллаһ өсөн улар араһынан таҙа, нескә кисерешле, аҙашыуға ҡаршы тора алғандары ҡәҙерлерәк.

Аллаһ билдәләгән сиктәрҙе ашатлап үтеүселәр - был донъяның ғына рәхәтлеген эҙләүселәр. Әгәр ҙә ахирәттәге яҡшылыҡтарҙы эҙләһәләр, Аллаһтың һүҙҙәре, Уның аяттары тураһында уйланырҙар ине, сөнки уларҙы һәр ерҙә лә күрергә мөмкин. Шул саҡта йөрәк хикмәт менән байытылып, йәнә хужаһына әйләнеп ҡайтыр ине.

Йөрәк Аллаһҡа зикер әйтеү менән туклана, ә уйланыуҙар, фекер йөрөтөү аша һыуһынын ҡандыра. Шул саҡта ғына йөрәк бысрактан таҙарына һәм хикмәт менән тулыша.

Ер ләззәттәренән баш тартып, үҙенең йөрәгенә яңы тормош һулышы бөрккәндәрҙе хикмәт һәм аҡыл эйәһе, тип атайҙар. Ә фани донъя ләззәте ҡолона әйләнгәндәрҙең теленән хикмәт ҡаса.

Наҙанлыҡ йөрәкте боҙа, уны фәҡәт тәҡүәлек һәм Аллаһҡа зикер әйтеү аша ғына төҙәтергә була. Был донъяның кәйеф-сафаһынан ҡасҡан йөрәк мәңгелектең фатихаһын алыу хоҡуғына эйә.

Аллаһты һағыныу һәм Уның менән осрашыу хыялы, йөрәккә еңел генә ҡағылып, был донъя теләктәрен ситкә алып китеүсе йомшаҡ елгә бәрәбәр. Үҙенең йөрәге Раббыһы менән булыуын теләгәндәр сабыр һәм тыныс затҡа әйләнә, ә йөрәгенең кешеләр араһында ҡалыуын теләгәндәр борсолоуҙа һәм хәүефтә йәшәйәсәк. Сөнки был донъяға бәйләнгән йөрәккә Аллаһҡа булған һөйөүгә үтеп инеүе ауыр, дөйәгә энә күҙәүе аша үтеүгә ҡарағанда ла.

Аллаһҡа үҙенең ҡолдары араһынан иң яҡыны - Уға ғибәҙәт ҡылыр өсөн таҙарынырға, тәһәрәтләнергә сакырыусы, тормошон Уға арнаусы, Аллаһҡа даими зикер әйтеүсе.

Йөрәк сиргә һабышҡас, тән дә ауырый башлай. Уның дауаһы - тәүбәгә килеү һәм яуызлыҡтан һаҡланыу сараһын эҙләү. Йөрәк бысранған көҙгөгә оҡшай башлай. Уны зикер әйтеп таҙартып була. Йөрәктең тән һымаҡ уҡ яланғас булыуы мөмкин, кейеме - тәҡүәлек, йәғни Аллаһтан ҡурҡыу.

Йөрәк тән һымаҡ уҡ асыға, һыуһай. Аслыҡты һәм талсығыуҙы ғилем, һөйөү, Аллаһы Тәғәләгә тапшырылыу-тәүәккәлләү, тәүбәгә килеү, һәм Уға ихлас ғибәҙәт итеү менән генә баҫып була.

# ҠАЙҺЫ БЕР ХӨКӨМДӘР ХАҠЫНДА

Әхмәт хажи ШӘЙӘХМӘТОВ,
Имам-мөхтәсиб
Әбйәлил районы

*Әғүҙү билләһи минәш-шәйтонир-рәжим. Бисмиләһир-Рахмәнир-Рахим.*

Беҙ был донъялыҡта өҫтөбеҙҙә булған бурыстарыбыҙҙы хәлебеҙҙән килгәнсе үтәп барырға тейешлебеҙ. Йәшәү рәүешебеҙҙең ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, был донъяны ҡалдырып, мәңгелегебеҙгә китәсәкбеҙ. Һүҙҙе мәрхүмдең мәйетен һуңғы юлға оҙатыуҙан башлайыҡ.

Мәйетте йыуып, кәфенләп, ләхет алып һәм йыназа намаҙы уҡып оҙатып ҡуйыу - беҙҙең изге бурысыбыҙ. Бына ошонда бик күп һорауҙар тыуа.

Беҙҙең халҡыбыҙҙа йыназала Ҡөрьәндән аяттар уҡып, хәйер-саҙаҡалар таратып, мәрхүм-мәрхүмәнең рухына Аллаһы Тәғәләнән еңеллек биреүен, белеп йә иһә белмәй ҡылған гонаһтарын ғәфү итеүен һорап, доғалар ҡылып, оҙатып ҡуялар. Берәй кеше үтә ныҡ ауырып китһә, уға "Йәсин" сүрәһен уҡып, Аллаһы Тәғәләнән еңеллек биреүен һорап доға ҡылалар. Аллаһы Тәғәлә үҙенең рәхмәте менән теләгән бәндәһенә ауырыуын, йә иһә йән биреүен еңеләйтә. Үә ләкин "Йәсин" сүрәһен мәйеттәр өсөн генә уҡый торған сүрә, тип уйлау дөрөҫ түгел.

"Кәһәф" сүрәһенең 10-сы аятында: "Раббыбыҙ, беҙҙе һәм беҙҙән алда иман килтергән туғандарыбыҙҙы ярлыҡа", - тиелгән. Тимәк, Аллаһы Тәғәлә үҙе беҙгә доға ҡылырға ҡуша. "Мәйҙә" сүрәһенең 2-се аятында: "Изге эштәрҙә бер-берегеҙгә ярҙам итешегеҙ! Гонаһлы эштә ярҙамлашмағыҙ" - тиелгән. "Ғафир" сүрәһенең 60-сы аятында: "Миңә доға ҡылығыҙ, һеҙгә яуап бирермен. Миңә ҡоллоҡ ҡылыуҙан тәкәбберләнгән кешеләр - улар мәңге тороу өсөн тамуҡҡа инер", - тип әйтә. Был турала күп хәҙистәр килтерергә мөмкин. Ләкин үлгән кешенең гонаһын үҙенә алыу тигәндә аңлатмай. Аллаһы Тәғәләнән мәрхүм мәрхүмәнең гонаһын кисереүен үтенеп доға ҡылыу, йәки берәй төрлө изгелек эшләп, хәйер-саҙаҡа биреп, мәрхүммәрхүмнең исеменән ҡабул итеүен һорап, доға ҡылыу ғына мөмкин.

Мәсәлән, Мөхәммәд Мостафа с.ғ.с.-дән: "Йә рәсүлуллаһ! Беҙ хәйер-саҙаҡалар биреп, изгелектәр, хаж ҡылып, ҡорбан салып, Ҡөрьән уҡып, тәүбә-истиғфар ҡылып, теге йәки был мәрхүм-мәрхүмәнең исеменән ҡабул ит, тиеп, доға ҡылабыҙ. Былар әрүәхтәребеҙгә ирешәме?" - тип һоранылар: Ул: "Эйе, әлбиттә, ирешә. Һеҙ үҙегеҙ берәйһенән бүләк алһағыҙ, нисек ҡыуанһағыҙ, һеҙҙең әрүәхтәрегеҙ ҙә шулай уҡ шатланалыр" - тип әйтте. Был хәҙисте Хафса р.ғ.-нең атаһы Ғүмәр хәҙрәт риүәйәт итә.

Быңдай мәжлестәрҙе өсө, етеһе, ҡырҡы булған өсөн генә үткәрмәйҙәр, әлбиттә. Мәрхүмдең вариҫтары ҡасан мөмкинлеге була, шул ваҡытта иҫкә алып, хәйер-доғалар ҡыла ала. Быңдай мәжлестәрҙә Ислам шәриғәте ҡанундары менән таныштырып, хәрәм менән хәләлдең айырмаларын аңлатып, өгөт-нәсихәт биреп үткәреү тағы ла яҡшыраҡ. Йәғни ошондай мәжлестәрҙә бик күп файҙалы эштәр эшләп була. Бынан беҙҙең динебеҙгә бер ниндәй ҙә зыян юҡ.

Тағы бер нәмәне асыҡлап үтергә кәрәк. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьән Кәримдең "Исра"сүрәһенең 15-се аятында әйтә: "һис бер йөк күтәреүсе икенсе йәндең йөгөн күтәрмәҫ". "Фатир" сүрәһенең 18-се аятында: "Йөк (гонаһ) күтәргән кеше икенсе берәүҙең йөгөн күтәрмәҫ, ауырлыҡ төшкән кеше уны күтәрергә саҡырһа ла, унан һис бер нәмә күтәрелмәҫ хатта туғандары булһа ла".

"Зүмәр" сүрәһенең 7-се аятында шулай тиелә: "Йөк күтәргән берәү ҙә икенсе кешенең йөгөн (гонаһын) күтәрмәҫ".

Ҡайһы бер ерҙәрҙә алда әйтеп үтелгәндәрҙең айырмаһын әлегә аңлап етеңкерәмәйҙәр. Теге йәки был мәрхүм-мәрхүмәнең ун-алтмыш йыллыҡ ҡылмаған ғәмәлдәрен, ҡылған гонаһтарын ҡабул иттем һәм кемгәләр икенсе берәүгә бирҙем, тип уйлайҙар. кешенең гонаһын ярлыкау, үтәмәгән ғәмәлдәрен кисереү, изге ғәмәлдәр өҫтәү һ.б. - Аллаһы Тәғәләнең хөкөмендә. Ә беҙ Аллаһы Тәғәләгә доға ғына ҡыла алабыҙ.

Һәм тағы ла бер нәмәне әйтеп үтәйем. Фидийә тигән саҙаҡа бар. Ул тотмаған ураҙа, үтәмәгән намаҙҙар өсөн фәҡирҙәрҙе ашатыу-эсереү, йә иһә шул миҡдарҙа аҡса биреүҙе аңлата. Ләкин берәүҙең дә гонаһтарын, йәки тотмаған ураҙаларының, уҡымаған намаҙҙарының яуаплылығын икенсе кешегә йөкләтеп булмай.

Ихлас күңел менән Аллаһы Тәғәләнең ризалығын өмөт итеп бирелгән саҙаҡа инша Аллаһ ҡабул булыр.

Йә Раббым! Беҙҙең барыбыҙға ла һаулыҡ-сәләмәтлек бир. Белеп-белмәй ҡылған гонаһтарыбыҙҙы ярлыҡа. Изге ғәмәлдәребеҙҙең әжер-сауаптарын арттыр. Беҙҙең ҡылған доғаларыбыҙҙы ҡабул итеп, беҙҙән хәйер-доға өмөт иткән әрүәхтәребеҙҙең рухтарына ирештереп, еңеллектәренде насиб ит. Ил-йортобоҙға именлек-тыныслыҡ һәм илебеҙ етәкселәренә динебеҙ, илебеҙ, халҡыбыҙ өсөн хәйерле хеҙмәттәр насиб ит! Амин!